МИНИСТЕРСТВО ОБРАЗОВАНИЯ И НАУКИ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ
ФЕДЕРАЛЬНОЕ ГОСУДАРСТВЕННОЕ ОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ ВЫСШЕГО ОБРАЗОВАНИЯ
БАШКИРСКИЙ ГОСУДАРСТВЕННЫЙ ПЕДАГОГИЧЕСКИЙ УНИВЕРСИТЕТ ИМ. М.АКМУЛЛЫ
Факультет башкирской филологии

# ПРОГРАММА
## вступительных испытаний по дисциплине
Родной (башкирский) язык и литература

УФА 2017

**М. Аҡмулла ис. БДПУ-ның башҡорт филологияһына ҡабул итеү имтихандары өсөн программалар**

**Башкорт теле**

Фонетика тураһында төшөнсә. Телмәр өндәре. Телмәр ағзалары. Өндәрҙең яһалышы, һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр. Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар. Өн һәм хәреф. Алфавит.

Лексика тураһында төшөнсә, һүҙҙәрҙең күп мәғәнәлелеге. Синонимдар. Омонимдар. Антонимдар. Башкорт теленең һүҙ байлығы, һүҙлектәр.

Орфография тураһында төшөнсә, һүҙьяһалыш, һүҙ составы. Нигеҙ. Тамыр. Ялғауҙар һәм уларҙың төрҙәре: һүҙ яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙар.

Морфология, һүҙ төркөмдәре тураһында төшөнсә. Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәр.

Исем. Исемдәрҙең яһалышы. Тамыр, яһалма, ҡушма, парлы исемдәр. Уртаҡлыҡ һәм янғыҙлыҡ исемдәр. Исемдәрҙең морфологик билдәләре һәм синтаксик функциялары.

Сифат. Сифаттың морфологик билдәләре, синтаксик функцияһы. Сифаттарҙың яһалыу юлдары. Төп һәм шартлы сифаттар. Сифат дәрәжәләре: төп, сағыштырыу, артыҡлыҡ, аҙһытыу дәрәжәләре.

Һан. Һандың мәғәнәһе, морфологик билдәләре, синтаксик функциялары. Ябай һәм ҡушма һандар, уларҙың дөрөҫ яҙылышы, һан төркөмсәләре: төп, тәртип, бүлем, сама, йыйыу, кәсер һандары. Һандарҙың килеш менән үҙгәреше.

Алмаш. Алмаштың телмәрҙә үтәгән вазифаһы, мәғәнә үҙенсәлектәре, грамматик билдәләре. Алмаш төркөмсәләре: зат, күрһәтеү, һорау, билдәләү, билдәһеҙлек, юҡлыҡ алмаштарҙың килеш менән үҙгәреше.

Ҡылым тураһында дөйөм төшөнсә. Ҡылымдарҙың синтаксик функциялары. Ҡылым һөйкәлештәре - хәбәр, бойороҡ, шарт, теләк һөйкәлеше. Ҡылым йүнәлештәре:төп, ҡайтым, төшөм, уртаклыҡ, йөкмәтеү йүнәлеше. Ҡылым төркөмсәләре: исем, уртаҡ, сифат, ҡылымдар.

Рәүеш. Рәүештәрҙең морфологик билдәләре, синтаксик функциялары. Рәүеш төркөмсәләре: төп, ваҡыт, урын, оҡшатыу, күләм-дәрәжә, сәбәп-маҡсат рәүештәре. Рәүештәрҙең яһалышы:

һүҙҙәрҙе ҡушыу, парлау, бәйләү, ҡабатлау, ялғау ҡушыу юлы менән яһалған рәүештәр. Рәүештәрҙең дәрәжәләре.

Ярҙамсы һүҙ төркөмдәре, уларҙың телмәрҙә урыны. Бәйләүес, уларҙың төрҙәре: исем, ҡылым бәйләүестәре. Теркәүестәр, уларҙың синтаксик функциялары. Теркәүестәрҙең бүленеше: теҙмә һәм эйәртеүле теркәүестәр. Киҫәксә. Киҫәксәләрҙең бүленеше, дөрөҫ яҙылышы.

Синтаксис, уның предметы, төп максаты, берәмектәре. Һүҙбәйләнеш: теҙмә һәм эйәртеүле бәйләнештәр. Һөйләм, уның телмәрҙәге урыны: хәбәр итеү, һорау, өндәү, бойороу. Ике составлы һөйләмдәр, һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйә менән хәбәрҙең ярашыу бәйләнештәре, һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре. Аныҡлаусылар, тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусылар. Тултырыусылар. Тура һәм ситләнгән тултырыусылар. Өҫтәлмәлектәр. Хәлдәр, уларҙың төрҙәре. Айырымланыу тураһында төшөнсә. Өҫтәлмәлектәрҙең, аныҡлаусыларҙың, хәлдәрҙең айырымланыуы. Айырымланған хәл әйтемдәре. Бер составлы һөйләмдәр. Бер составлы һөйләмдәрҙең төрҙәре: билдәле эйәле, билдәһеҙ эйәле, эйәһеҙ, атама һөйләм. Кәм һөйләмдәр, тиң киҫәкле һөйләмдәр, уларҙың телмәрҙәге урыны. Өндәш һүҙҙәр. Инеш һүҙ һәм инеш һөйләмдәр. Ҡушма һөйләм. Теркәүесле һәм теркәүеcһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр. Теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. Эйәртеүле ҡушма һөйләм. Баш һәм эйәрсән һөйләм. Эйәрсән һөйләм төрҙәре: эйә, хәбәр, аныҡлаусы, тултырыусы һөйләмдәр. Хәл һөйләмдәр: ваҡыт, урын, рәүеш, күләм-дәрәжә, сәбәп, маҡсат, шарт, кире һөйләмдәр. Тыныш билдәләре: нөктә, өтөр, нөктәле өтөр, һыҙык, ике нөктә, уларҙың ҡуйылыу осрактары.

Стилистика. Башкорт теленең функциональ стилдәре. Уларҙың төп үҙенсәлектәре.

## Башҡорт әҙәбиәте

Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады, уның традицион жанрҙары. Әкиәттәр, уларҙың тематик төркөмсәләре. Әкиәттәрҙә образ тыуҙырыу үҙенсәллектәре. Эпостар, уларҙың тематикаһына һәм ижад ителешенә ҡарап төркөмләнеше. “Урал батыр” эпосы. Йырҙар, уларҙың тематик төркөмсәләре. Оҙон һәм ҡыҫка йырҙар. Таҡмаҡтар. Афорстик жанрҙар: мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтар.

Болғар осоро әҙәбиәте. Ҡол Ғәлиҙең «Йософ ҡиссаһы» әҫәре. Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһе, проблематикаһы, образдар системаһы, башҡорт әҙәбиәте тарихында урыны.

XVIII быуат әҙәбиәте. Сәсәндәр ижады. Яҙма әҙәбиәт. Әҙәби-тарихи ҡомартҡы булараҡ шәжәрәләр, тәуарихтар, хаттар. Батыршаның

батшаға яҙған хаты. Салауат Юлаев ижады. Әҙәбиәттә һәм сәнғәттә Салауат образы.

XIX быуат әҙәбиәте. «Ҡуҙый күрпәс» повесы. Әҙәбиәттә мәғрифәтселек идеялары. М. Аҡмулла поэзияһы. М. Өмөтбаевтың, Р. Фәхретдиновтың мәғрифәтселек идеялары.

XX быуат башы әҙәбиәте. Поэзия, проза, драматургия. Ш.Бабич ижады. Әҫәрҙәрендә милли азатлык, мәғрифәтселек идеяларының; сағылышшы. Әҙиптең поэтик оҫталығы. М. Ғафури ижады. Тәүге әҫәрҙәрендә мәғрифәтселек идеяларының сағылышшы. Повестары. С. Яҡшығолов тоң тормошо һәм ижады. «Башҡорт ағаларыма хитап», "Дим буйы" шиғырҙары. Ф. Сөләймәнов ижады. "Башҡорт моңо", "Тимербай ҡурайсы" әҫәрҙәре. Д. Юлтый ижады. Поэзияһы, прозаһы, драматургияһы. «Ҡан» романы. «Ҡарағол» драмаһы. Ә. Вәлиди Туған. Тормошо һәм дәүләт эшмәкәрлеге. "Хәтирәләр" мемуар китабы. Ғайнан Хәйри ижады. Повестары. "Боролош" романы. Ғ. Сәләм поэзияһы. Поэмалары. Һ. Дәүләтшина прозаһы. «Ырғыҙ» романы. Р. Ниғмәти поэмалары. М. Буранғолов – сәсән, драматург. "Башҡорт туйы" драмаһы. Б.Бикбайҙың поэзияһы, прозаһы, драматургияһы. «Ер» поэмаһы, «Аҡсәскә» повесы, «Ҡарлуғас» драмаһы. З. Бишева ижады. Повестары, «Яҡтыға» трилогияһы. М. Кәрим ижады. Поэзияһының тематикаһы, проблематикаһы. Поэмалары. «Ҡара һыуҙар» әҫәре. Прозаһы. Повестарында балалар образының, бирелеше. «Оҙон оҙаҡ бала саҡ» әҫәре. Н. Нәжми ижады. Поэзияһы. Драматургияһы. Поэмалары. «Урал» әҫәре. Р. Ғариповтың ижади мираҫы. «Табыныу» поэмаһы. Ә. Хәкимовтың прозаһы. Повестарында һуғыш темаһы. «Аҡһак бүре», «Бәйге» әҫәрҙәре, «Өйөрмә» романы, Ғ. Хөсәйенов ижады. Парсалары, "Батырҙар ҡиссаһы". Н. Мусин ижады. Экологик проблеманың хәл ителеше, кеше, халыҡ яҙмышы мәсьәләһе. «Йыртҡыс тиреһе» повесы, «Мәңгелек урман» романы. Р. Бикбаев поэзияһы. Поэмалары. Р. Солтангәрәев хикәйәләре. Д. Бүләков прозаһы. Повестары, романдары. А. Абдуллин ижады. "Ун өсөнсө председатель" драмаһы. Х. Назар ижады. "Асманға ашыу", "Хакимлыҡта" монологы. Талха Ғиниәтуллин ижады. "Әсә һәм бала", "Мәтрүшкә еҫе" хикәйәләре. Башҡортостандың халыҡ шағирҙары, халыҡ яҙыусылары.

## Инша яҙыу буйынса ҡыҫҡаса методик кәңәштәр

Иң тәүге мөһим талап - иншаның темаһын һайлау. Теманы дөрөҫ һайлау - уңыштың башы. Әйтәйек, тәҡдим ителгән темалар араһында берәүһе үҙенең ҡыҙыҡлығы, актуаллеге менән һинең иғтибарыңды йәлеп итә. Һиндә мотлаҡ ошо темаға яҙыу теләге тыуҙы ти, әммә үҙ мөмкинлектәреңде лә онотоп ебәрмә. Әҙәби материал етерлек кимәлдә укылғанмы, был теманы асыр өсөн белемең етерлекме — тик бар мөмкинлектәреңде үлсәп, үҙ-үҙеңә тамам ышанғас ҡына, иншаңды яҙа башларға мөмкин.

Шулай итеп, тема һайланды, хәҙер уны нисек башлап ебәрергә тигән һорау тыуа. Теманан һуң яҙылған беренсе фраза — инша сюжетының аскысы. Ул — яҙыласаҡ бөтә уй-фекергә лә, текстың стиленә лә йүнәлеш бирәсәк. Тәүге һөйләм ҡорорак, академик тонда булһа, мәҫәлән, «Күренекле башкорт әҙибе Мостай Кәримдең ижады тәрән фәлсәфәүи мәғәнәгә эйә», тип биреүҙән торорға һәм ошо уҡ етди академик стилдә яҙылырға тейеш.

Ә инде иншаңды үҙеңдең исемеңдән, йәки лирик тондарак «мин, минең уйлауымса», тигәнерәк характерҙа яҙырға уйлайһың икән, бында текст башында: «Минең ҡарашҡа, башҡорт әҙәбиәтендә Мостай Кәримдең ижадынан да тәрәнерәк, тормошсанырак, фекергә бай ижад юҡ һымаҡ...» кеүегерәк һөйләм уңышлыраҡ булыр.

Икенсе бер осраҡта, иншаның башы һайлап алынған темаға ярашлы әһәмиәтле бер әҫәрҙән иҫ китмәле тәрән йөкмәткегә эйә булған берәй һөйләм — цитатанан да тороуы ихтимал. Мәҫәлән, шул ук М.Кәримдең «Ярлыҡау» повесынан «таштар ғүмерле шул» тигән бәләкәй генә һөйләм — цитатанан башлап китһәң, күпме фекер, күпме байлык ята алдында. Асылда бит бында һүҙ, ғөмүмән, һуйыр ташы тураһында түгел, ә кеше күңеле, рухы, уның ғүмере тураһында бара. Таш кеүек һалҡын. ҡаты бәғерле, яна-көйә, ҡайғыра, һөйә белмәгән кеше, әлбиттә, оҙағыраҡ йәшәй. Ә Любомир, Данко, Бабич кеүектәр ғүмерҙәрен осҡондан ялҡынға әйләндереп йәшәгән кешеләр, бик әҙгә генә киләләр был Фани донъяға. Ошо тиртағы һөйләмдәр бай һәм тәрән фекерҙәргә табан дөрөҫ йүнәлеш бирә түгелме һуң?

Әлбиттә, материалды белһәң, фекерҙәрең тос булһа, тел байлығы ла килер үҙеңә. Ләкин ул байлыкты баштан уҡ бик һаҡ ҡулланырға кәрәк: һәр һүҙ, һәр һөйләм үҙ урынында булырға тейеш; бер үк һүҙҙе йәки һөйләмде, тимәк фекерҙе йыш ҡабатлауҙан һаҡлан. Фекерҙе аныҡ һәм эҙмә-эҙлекле итеп бирә белеү бик мөһим. Шуның өсөн дә иншаның үҙенең эске бер схемаһы, йәғни логик йөкмәткеһе булырға тейеш. Бер башлаған уйыңды әйтеп бирмәйенсә тороп, икенсеһенә күсергә ашыҡма, әгәр ҙә уны ҡабатларға тура килә икән, тик «үрҙә әйтелгәнсә» тигән һылтаныуҙар менән генә эшләү мотлаҡ.

Цитаталар менән башлау тураһында үрҙә әйтеп үткәйнек инде. Сөнки уларға инша башында ғына түгел, артабан да, йәғни эш барышында ла мөрәжәғәт итергә кәрәк бит.

Уның да үҙ ҡанундары бар. Әгәр ҙә цитатаны тулыһынса килтерергә уйлайһың икән, уның теүәллеге тураһында ла ҡайғыртырға кәрәк. Шуны иҫтән сығарырға ярамай: был осраҡта һәр бер тыныш билдәһе, һәр бер һүҙ авторҙың тексындағы һымаҡ һәм, әлбиттә, тырнаҡ эсендә булырға тейеш. Әгәр ҙә һөйләмде теүәл, дөрөҫ итеп килтерә алмайһың икән, унын, берәй иң кәрәк, иң мөһим өлөшөн генә, бик тә булмаһа, бер һүҙен генә алып, уны үҙ фекеренә ялғап ҡуйып та була. Эш барышында һәр ваҡыт үҙеңә: «Ә был һөйләм, абзац, ғөмүмән, был фекер темаға ярашлымы, уны асырға

ярҙам итәме? — тигән һорау бирергә кәрәк, сөнки был проблеманан ситкә китмәҫкә ярҙам итер, ә теманан ситкә китеү -иншаның ҙур етешһеҙлеге һанала.

Иншаның төп материалы темаға ярашлы һайланып алынған әҙәби әҫәр булып торһа, авторҙың текстағы теге йәки был күренешкә, йәки вакиғаға үҙ карашы, фекере, баһаһы иншаның йәме булыр. Уңайы сыҡкан һайын үҙ фекереңде әйтеп китеү отошлорак. һәр әйтелгән фекер иҫбатлауҙы , дәлилләүҙе талап итә. Уларҙы һин текстан алып бик оҫта ҡуллана белергә тейешһең. Әммә бында ла саманы онотторға ярамай. Беренсенән, уларҙы күп итеп килтереү мотлаҡ түгел. Икенсенән, артыҡ үҙаллылыҡтан, уйҙырманан һаҡ булырға кәрәк. Авторға көсләп теге йәки был уй-фекерҙе тағыу, һөҙөмтәлә иншаның бәҫен төшөрөүе бар.

Һәр яңы фекер ҡыҙыл юлдан башланып китергә тейеш. Инеш һүҙҙәр, инеш һөйләмдәр иншаңды йөкмәтке яғынан да байытыр. Тик уларҙы кәрәк сакта йәйәләр эсенә ҡуйырға, йә булмаһа тейешле тыныш билдәләре (, . : - «» ! ?) менән айырырға онотма.

Инша, ғәҙәттә, өс өлөштән тора: инеш, төп өлөш, һығымта йәки йомғаҡлау. Улар һәр береһе логикаһы, эҙмә-эҙлеклеге, мәғәнәһе, йөкмәткеһе менән тығыҙ бәйләнештә булғанда ғына бер бөтөн эште хасил итәләр. Иншаның күләме яғына килгәндә — конкрет талап юк, сөнки был уның темаһына һәм шул теманың асылыуына ҡарай. Тос-тос фекерҙәр ярҙамында әҙ яҙып та күп әйтергә мөмкин. Был йәһәтән беҙҙең кәңәш шулайырак: инша күләме 2-5 биттән (әлбиттә, тулы бит күҙ уңында тотола, ә бер тулы бит уҡыусылар телендә 1 табак) дә кәм булырға тейеш түгел һәм 3-5 биттән дә артык булырға тейеш түгел. Инеш өлөшө лә, йомғаҡлау өлөшө лә иншаның ундан берәр өлөшөн тәшкил итергә тейештәр. Йәғни инешкә текстың 10%, йомғаҡлауға 10% алғас, төп өлөшкә 80% ҡалырға тейеш.

Инша өсөн план, эпиграф мотлаҡ түгел. Әгәр ҙә темпын асырға ярҙам итеүсе уңай ғына берәй эпиграф табыла икән, был инша тикшереүселәр яғынан һис шикһеҙ ыңғай баһа аласак. Эпиграф тырнаҡ эсенә алынмай, тик мотлаҡ авторы күрһәтелергә тейеш. Әгәр ҙә мәктәптә план яҙырға өйрәнгәнһегеҙ икән, планһыҙ инша яҙыуҙы күҙ алдына килтерә алмаған хәлдә түбәндәгеләрҙе иғтибар үҙәгендә тоторға кәрәк. План темаға тап килергә, йәғни уны асырға, фекер үҫешенең эҙмә-эҙлелеген күрһәтергә, стилистик яҡтан дөрөҫ булырға тейеш. Инша яҙғанда план өлөштәре (инеш, төп өлөщ, йомғаҡлау) араһындағы пропорционаллектең дә һакланыуы мөһим. Уларҙың һәр береһенең инша йөкмәткеһен асыуҙа үҙ урыны, роле бар. Пландың иншаның композицион төҙөклөгөн булдырыуҙағы ролен инҡар итеп булмай. Абитуриент инша яҙа башлағанға тиклем бына нимәне күҙ алдынан кисерергә тейеш: автор үҙенең әҫәрен нисек башлап киткән, тасуирлау процесында фекерен нисек үҫтергән (төп өлөш) һәм нисек тамамланған (йомғаҡлау). Улар араһында эҙмә-эҙлелек, йәки бәйләнеш бармы?

Иншаның айырылһығыҙ өлөшө булған ҡаралама тураһында ла айырым әйтмәй булмай. Фекер туплауҙа, иншаны эҙмә-эҙлекле итеп бер конструкцияға ойоштороуҙа, эш процессында теге йәки был йәһәттән иншаны байытыуҙа ла ҡараламаның әһәмиәте ифрат ҙур! Ғөмүмән алғанда, ҡаралама иншаның стиль һаҡсыһы. Тейешле урынға ҡуйылмаған, йәки төшөп ҡалған тыныш билдәләрен, йә булмаһа орфографик хаталарҙы эш барышында, бик тә булмаһа аҡҡа күсергәс тә, төҙәтеп була. Ә бына стиль менән эш башҡасараҡ. Шуның өсөн дә бар яғынан да килгән, уңышлы инша килеп сыҡһын тиһән, һәйбәт итеп ҡаралама менән эш итергә кәрәк. Һөйләмдәр балалар яҙыусыһыныҡы кеүек — ябай ҙа, аҡыллы ла булһын.

Шулай итеп, инша башта мотлаҡ ҡараламала яҙылырға тейеш, әммә уға ваҡытты дөрөҫ бүлергә кәрәк, юғиһә эште аҡҡа күсереү ашығыс булыуы мөмкин, ә был көтөлмәгән хаталарға килтереүе ихтимал. Ә турана-тура аҡҡа яҙһаң, кире яҡтары бик күп: ваҡыт, әлбиттә, әҙ файҙаланыла, әммә инша йөкмәткеһе Тулы килеп сыҡмай, төрлө хаталар барлығы асыҡлана, һөҙөмтәлә, төҙәтмәләр индерергә тура килә. Шуға күрә иң башта, үрҙә әйтелгәнсә, теманы ентекле уйларға, план төҙөргә (төҙөгөң килһә, әлбиттә), иншаның төп фекерен (идеяһын) аскан урындарҙы яҙырға, кулланыласак цитаталарҙы, эш материалын тәртипкә килтерергә һәм, күберәк ваҡытты иншаны ҡараламала камиллаштырыуға һәм һуңынан ғына аҡка күсереп яҙыуға бирергә кәрәк. Һеҙгә һайлап яҙыу мөмкинлеге биреү ниәте менән, имтиханда инша өсөн биш тема тәкдим ителәсәк. Шуларҙың береһе ирекле тема булып сығыуы ла ихтимал.

Ирекле темаға материал ҡайҙан һәм нисек туплана һуң? Төп материал — әҙәби һәм публицистик сығанаҡтар, тарихи документтар. Хәҙерге заман информацияһының белемде арттырыуҙағы, фекерҙе, телмәрҙе байытыуҙағы роле ифрат ҙур. Һеҙҙең күҙәтеүҙәрегеҙ, тормош тәжрибәгеҙ, кластан тыш уҡылған китаптарығыҙ, башҡа фәндәр буйынса (тарих, йәмғиәтте өйрәнеү, рус һәм сит илдәр әҙәбиәте, география һ.б.) алған белемдәрегеҙ, кинофильмдар, спектаклдәр, радио һәм телетапшырыуҙар ҡарауығыҙ, гәзит-журналдар уҡыйһығыҙ - барыһы ла ирекле инша өсөн бай сығанаҡ булып тора. Һайлап алған темағыҙ өсөн үрҙә һанап киткән материалдың иң мөһимен генә алырға кәрәк.

## Башкорт теле һәм әҙәбиәте буйынса ҡабул итеү имтихандарында яҙылған иншаларҙы баһалау критерийҙары

Иншаларға баһаларҙы түбәндәге талаптарға таянып билдәләргә була.

Тема тәрән итеп асылып, әҙәби материал яҡшы сағылыш тапҡан, йөкмәткеһе тулы һәм оригиналь булған, башҡорт әҙәби телендә яҙылған, һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр уңышлы ҡулланылған хатаһыҙ йәки бер генә пунктуацион хаталы эшкә «85-100» балл ҡуйыла.

«65-85» балл әҙәби материалды бирә алған, әммә оригиналлек менән
айырылып тормаған, һөйләмдәр төҙөлөшөндә бер-ике стилистик етешһеҙлеге булған диктанттағы кеүек «4»-ле билдәһенә тап килгән 2/2, 1/3, 3/1, 4/0 орфографик һәм пунктуацион хаталы иншаларға ҡуйыла.

Темаға тулыраҡ яуап биргән, әммә фактик материалды биргәндә хаталар киткән, бер аҙ эҙмә-эҙлелек боҙолған, өс-дүрт стилистик хаталар ебәрелгән, орфографик һәм пунктуацион хаталары ебәрелгән (4/5, 5/4, 6/3, 3/6, 7/2, 2/7) инша «45-65» балл менән баһалана.

«1-45» билдәһе программаға, инша талаптарына тап килмәгән, йөкмәткеһе дөрөҫ бирелмәгән, биш-ете стилистик, 5/6, 5/5, 6/5, 7/4, 7/3, 8/2, 2/8 хаталы иншаларға ҡуйыла.

## Примерные темы для сочинений

(2017/2018 уҡыу йылы)

1) Ирҙе намыҫ матурлай (З.Биишеваның "Һөнәрсе менән Өйрәнсек" әҫәре буйынса).
2) Һ.Дәүләтшинаның "Ырғыҙ" романында халыҡтар дуҫлығы.

3) Эй, ғүмерҙең һуңғы сәғәте!

Һин миңә лә шулай күкрәп кил.

Уландарын иҫкә алғанда,

Онотмаһын мине лә Тыуған ил!

(Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған әҙип-яугирҙар ижадына күҙәтеү).

4) "Телде тоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән уян, халҡым, уян, милләтем!" (Р.Бикбаевтың "Халҡыма хат" поэмаһы буйынса).

5) Легендаға әүерелгән кешеләр.

**Иҫкәрмә**: имтиханда был темаларҙың булмауы ла мөмкин.

## ӘҘӘБИӘТ ИСЕМЛЕГЕ

Баимов Р.Н.,Г.Н. Гареева,Р.Х. Тимергалина. Писатели земли башкирской. Справочник. Уфа: Китап, 2016

Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 1-се том. - Өфө:Китап, 1990.

Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 2-се том. - Өфө:Китап, 1990.

Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 3-сө том. - Өфө:Китап, 1990.

Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 4-се том. - Өфө:Китап, 1993

Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 5-се том. - Өфө:Китап, 1995

Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 6-сы том. - Өфө:Китап, 1996.

Башҡорт халыҡ ижады. Хрестоматия. / Төҙөүсеһе Хөсәйенов Ғ.Б. – Өфө: Ғилем, 2006.

Вахитов А. Башҡорт прозаһының жанр-стиль ҡанундары. – Өфө: Китап,2007.

Галин С.А. Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады. – Өфө:Китап, 2004.

Егерменсе быуат башҡортәҙәбиәте. - Өфө, БДУ нәшриәте, 2003 й.

История башкирской литературы. В 4 томах. Том 1. – Уфа: Китап, 2012.

История башкирской литературы. В 4 томах. Том 2. – Уфа: Китап, 2015.

Надршина Ф.А. Память народная: Исторические корни и жанровые особенности башкирских народных преданий и легенд. Изд. 2-е, доп. - Уфа: Гилем, 2006.

Сулейманов А.М.Истоки чуда. - Уфа: Китап, 2001.(на башкирском языке).

Сулейманов А.М. Детский игровой фольклор. - Уфа: Китап, 2007.(на башкирском языке).

Султангареева Р.А. Жизнь человека в обряде. - Уфа: Гилем, 2000.

Хөсәйенов Ғ. Б. Башҡорт әҙәбиәтенең поэтикаһы. Беренсе китап. Теоретик поэтика. - Өфө: Ғилем, 2006.

Хөсәйенов Ғ. Б. Башҡорт халҡының рухи донъяһы. - Өфө, 2003.

Хөсәйенов Ғ. Б. Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге. – Өфө: Ғилем, 2006.